# ГӘЛСӘР ШИШМӘ

(Әкиәт- легенда)



**Ғәйнаншин Динислам 13 йәш**
**Күмертау ҡалаһы 10-сы урта**
**мәктәбенең 7а класы уҡыусыһы**
**Етәксеһе: Батыршина Лилиә**
**Рафиҡ ҡыҙы**
**электрон почта: liya.batyrshina76@mail.ru**
**телефон: 8927-230-29-04**

Борон-борон заманда тау-урмандар менән уратып алынған аҡланда гәлсәр һыулы шишмә аҡҡан, ти. Был шишмә тураһында ишетеп тирә-яҡтан кешеләр

килер булған. Сөнки уның һыуы шул тиклем тәмле, шул тиклем шифалы булған, ти. Уны эскән кеше барлыҡ ауырыуҙарын онотҡан, әллә нисә йәшкә йәшәреп киткән, ти.

Йылдар үтә торған, яйлап ҡына Гәлсәр шишмәнең ике ярында матур- матур йорттар ҡалҡып сыҡҡан. Бында йәшәгән халыҡ бик бай  булған: ҡыйбатлы тундарҙа, ҡиммәтле биҙәүестәрҙә генә йөрөр булғандар. Улар бик татыу һәм бәхетле йәшәгәндәр, бер- береһенә ҡунаҡҡа йөрөшкәндәр, ти. Һәр йорттоң ишек алдынан бәхет, шатлыҡ ҡына бөркөлөп торған,ти. Ауылда йәшәүселәр уңғанлыҡтары менән айырылып торған, ти. Көн дә шифалы шишмә һыуын эсеп, шул һыу менән йыуынғас, улар бер ҡасан да ауырымағандар, йөҙ йәшкә тиклем йәшәгәндәр. Ауыл һылыу ҡыҙҙары һәм баһадир егеттәре менән дан тотҡан, ти.

Ошо йорттарҙың береһендә Ҡабырғай исемле батыр йәшәгән, ти. Ул халыҡ араһында аҡыллыҡ, ғәҙеллек менән дан ҡаҙанған булған, уны бөтәһе лә ятаҡҡан, хөрмәт иткән.



Бер ваҡыт ауылға бәлә килгән. Ауылдан алыҫ түгел генә, мәмерйәлә, ете ҡат ер аҫтында, яуыз Аждаһа йоҡоһонан уянған, ти. Ул Гәлсәр шишмәнең

мөғжизәле көсө тураһында ишетеп, уны урламаҡсы булған, ти.



Бер көндө Аждаһа Ҡабырғайҙың һунарға киткәнен ҡарап торған да үҙенең мәкерле эшен эшләргә уйлаған. Ул Гәлсәр шишмәнең ағымын үҙенең мәмерйәһенә табан бороп ебәргән, ти. Аждаһаның был ҡыланышынан тау-таштар емерелә, урман шаулай, ҡоштар сырҡылдаша, кейектәр йүгерешә башлаған, ти. Был шау-шыуҙы ишетеп Ҡабырғай батыр атын ауыл яғына борған. Ат тояҡтары тауышын ишетеп, аждаһа ҡалтырап төшкән, ҡурҡышынан дер һелкенеп, таш кеүек ҡатып, шишмә өҫтөнә ҡолаған. Шул урында бейек ҡая барлыҡҡа килгән, ти.

Гәлсәр шишмәне ауыл халҡы бик оҙаҡ эҙләгән. Көндәрҙән бер көндө Ҡабырғай батырҙың аты, нимәлер һиҙенеп, һиҫкәнеп ҡуйған. Ул тояҡтары менән ерҙе сапсый башлаған, ти.



Ҡабырғай ҡамсыһы менән киҙәнеп, таш ҡаяға һуғып ебәргән. Ҡая ярылып киткән һәм ҡояш нурҙарына емелдәп Гәлсәр шишмә урғылып килеп сыҡҡан,

ти. Әлеге көндә лә ауыл кешеләрен тәмле, шифалы һыуы менән ҡыуандырып, аға ла аға икән.



# Ҡыйыу турғай балаһы



**Абдуллин Азамат, 8 йәш**
**Күмертау ҡалаһы 10-сы урта**
**мәктәбенең 2А класы укыусыһы**
**Етәксеһе: Батыршина Лилиә**
**Рафиҡ ҡыҙы**
**электрон почта: liya.batyrshina76@mail.ru**
**телефон: 8927-230-29-04**

Борон-борон заманда, урмандың бер осонда яңғыҙ ҡайын үҫеп ултырған,ти.



Шул ҡайындың башында бер турғай ғаиләһе йәшәгән, ти. Турғайхан менән Турғайбикәнең берҙән- бер тумалаҡ ҡына Турғайшуҡ исемле улдары булған. Атаһы менән әсәһе улдарын бик яратҡандар,ти. Атаһы тәмле селәүсендәр алып ҡайтһа, әсәһе ояларын йылытып, бөхтәлектә тотҡан.Улар уларын тәрбиәләргә лә онотмаған, тәбиғәтте яратырға, ололарҙы хөрмәт итергә, кеселәрҙе кәмһетмәҫкә өйрәткән, ти.

Бер көндө,Турғайшуҡтың ата-әсәһен күрше урмандағы инәләре ҡунаҡҡа саҡырған, ти. Улар улдарына өгөт- нәсихәттәр әйтеп, оянан бер ҡайҙа ла сыҡмаҫҡа ҡушып, юлға сыҡҡандар, ти.

Бер аҙҙан, күк йөҙөндә ҡара болотттар барлыҡҡа килгән һәм тирә-яҡта дауыл ҡупҡан, ти. Көслө ел бәләкәй турғайҙарҙы ояһы менән бергә ергә алып ташлап, осороп ебәргән, ти.

Турғайшуҡ иҫенә килһә, дауыл туҡтаған, тирә-яҡ тып-тыныс булып ҡалған, ти. Әммә ул ҡара урман эсендә ята икән. Ата- әсәһен саҡырып оҙаҡ ҡына илаған. Уның тауышын ишетеп, Төлкөбикә килеп еткән, ти. Хәйләкәр төлкө турғай балаһын алдаштырып нисек тә ашарға уйлаған. Шул ваҡыт Турғайшуҡ әсәһенең төлкө тураһында иҫкәрткән һүҙҙәрен иҫенә төшөргән. “Нисек тә булһа ҡотолорға кәрәк”- тип уйлап, йүгерә башлаған, ти. Йүгерә торғас, ҡанаттарының нығынғанын һиҙеп ҡалған. Ҡанаттарын елпеп- елпеп

йүгерә торғас, яйлап ҡына өҫкә күтәрелә башлаған, ти. Төлкө саҡ- саҡ эләктереп ҡалмай үҙен.

Урман өҫтөнә күтәрелеп, Турғайшуҡ  үҙҙәре йәшәгән ҡайынды эҙләп тапҡан, ти. Ҡайынға яҡынлашҡас, ул атаһы менән әсәһенең илашҡан тауыштарын ишетеп ҡалған.

- Атай, әсәй! Мин ҡайттым! Ҡарағыҙ, мин оса беләм!- тип ҡысҡырып ебәргән, ти.

Атаһы менән әсәһе улдарының иҫән- һау булғандарына  бик ҡыуанғандар ҡосаҡлап алғандар, ти.
Ошо хәлдән һуң, улар тағы ла нығыраҡ бер-береһен йәшәй башлағандар, ти.



# Ологүл

(Әкиәт –легенда)



**Ибрагимова Камилла 15 йәш**
**Күмертау ҡалаһы 10-сы урта**
**мәктәбенең 6Б класы уҡыусыһы**
**Етәксеһе: Усманова Земфира**
**Ирек ҡыҙы**
**электрон почта: usmano1971@mail.ru**
**телефон: 8987-103-56-14**

Борон-борон заманда бер ауылда йәшәгән ти бик татыу ғаилә. Уларҙың береһенән-береһе уңған, һылыу, аҡыллы өс  ҡыҙҙары булған, ти. Атай кеше иген сәскән, мал көткән, һунарға йөрөгән, әсәләре ҡымыҙ бешкән, йөн иләгән.

Йәмле йәй көндәренең береһендә  ҡыҙҙар еләк йыйырға барырға булған, ти. Әсәләре ҡыҙҙарына ауыл янындағы урмандан йыраҡ йөрөмәҫкә ҡушып, кесе ҡыҙыы Кинйәбикә менән өйҙә ҡалған, ти.

Ҡыҙҙар күберәк еләкле аҡлан эҙләп, ауылдан йыраҡлашып Торай кисеүен дә уҙып киткәндәр, ти. Торай кисеүенән һуң башҡорт ерҙәре бөтә, ҡаҙаҡ далалары башлана икәнлеге лә иҫтәренән сыҡҡан шул. Тап ошо мәлдә ҡыҙҙарҙы йылға буйында көтөү көтөп йөрөгән ҡаҙаҡ егеттәре күреп ҡалып, арттарынан ҡыуа төшкән, ти. Күрәһең, һылыу башҡорт ҡыҙҙарын урлап, кәләшлеккә алмаҡсы булғандарҙыр инде.  Һыбайлылар йәйәүле ҡыҙҙарҙы ауылға етәрәк  ҡыуып еттек тигәндә, ҙур ғына күл алдында туҡтап ҡалғандар, ти. Ҡыҙҙар күп уйлап тормай бер-бер артлы күлгә һикергәндәр ҙә, ауыл яғына йөҙөп киткәндәр. Күл уртаһына еткәс кенә ҡыҙҙарҙың олоһо һыу аҫтына төшөп киткән дә, юҡ булған. Быны күргән һыбайлылар кире әйләнеп сапҡан, а уртансы ҡыҙ илай-илай ауылға йүгергән, ти.

Ярҙамға килгән ауыл кешеләре күпме генә эҙләһәләр ҙә, ҡыҙҙы таба алмағандар.  Оло ҡыҙ батҡан күл уртаһында һары томбойоҡ сәскәләре генә ҡалҡып сыҡҡан.  Шунан бире күлде Оло ҡыҙ күле тип, тора-бара Ологүл тип атай башлағандар икән, ти.



# Суфый синңерткә



**Байгазаков Богдан, 8 йәш**
**Күмертау ҡалаһы 10-сы урта**
**мәктәбенең 2А класы уҡыусыһы**
**Етәксеһе: Батыршина Лилиә**
**Рафиҡ ҡыҙы**
**электрон почта: liya.batyrshina76@mail.ru**
**телефон: 8927-230-29-04**

Урман эргәһендәге аҡланда суфый сиңерткә йәшәгән, ти. Йәй көнө уға рәхәт, йылы булған. Бөжәктәргә һөжүм иткән, үләндәрҙең ысыҡтарын эскән, ти.

Бына көҙ еткән: көндәр һыуыта башлаған, ти. Бөтә бөжәктәр ҙә үҙҙәренә оя эҙләп, ҡышты үткәреү, йоҡлау өсөн үләндәр һәм япраҡтар аҫтына йәшенгәндәр, ти. Суфый сиңерткә лә ҡышҡылыҡҡа әҙерләнә башлаған, ти. Үҙенә бер бәләкәй генә соҡор тапҡан, йомшаҡ булһын өсөн, үлән-япраҡ түшәгән, ти.

Бер көн суфый сиңерткә аҡлан буйлап йөрөп килергә сыҡҡан, ти. Ә кире әйләнеп ҡайтҡанда, уның урынында ҙур ҡамҡа ята икән, ти. Ул суфый сиңерткәне ҡыуып сығарған, ти. Суфый сиңерткә яңы оя эҙләй башлаған. Ләкин бөтә яҡшы урындар буш булмаған. Ул асыға һәм өшөй башлаған, ти.

Шул ваҡыт юлдан бер малай китеп барған һәм ул суфый сиңерткәне күреп ҡалған, ти. Уны өйөнә алып ҡайтҡан да быяла һауытҡа ҡуйған, көн һайын ашатҡан,ти. Суфый сиңерткәгә былдай тормош бик оҡшаған, ти. Уға йылы һәм рәхәт булған өсөн, ул был ҡышты йоҡлап үткәрмәгән,ти. Беренсе тапҡыр ҡышты күргән,ти. Уға ҡарлы ап-аҡ ҡыш бик ныҡ оҡшаған, ти. Шулай уҡ тәүгә ҡупшы шыршыны күргән, ти, суфый сиңерткә.

Йәмле яҙ еткәс, малай суфый сиңерткәне кире аҡланға ебәргән, ти. Ул үҙенең дуҫтары менән осрашҡан һәм уларға ҡыш тураһында һөйләгән, ти. Бөтәһенә лә был һөйләшеү ҡыҙыҡ булған, сөнки бөжәктәрҙең береһененң дә ҡышты күргәне булмаған бит.

